***Хөрмәтле ата-әсәләр!***
***Бында яҙылған кәңәштәр, мәғлүмәттәр һеҙгә ярҙам күрһәтер, тип ышанып ҡалам.***

Бала тәрбиәләүҙә ғаиләнең роле.

Ғаилә- ир менән ҡатындың бергәләп төҙөгән ябай, әммә әһәмиәтле бер ҡоролошо ул. Һәр бала үҙ ризығы менән тыуа. Сабыйын тәү тапҡыр күкрәгенә ҡыҫҡан әсәнән дә бәхетлерәк, бала һөйөүенә тәрөләп йәшәгән атайҙан да ғорурыраҡ кеше, шат ауаздарға күмелгән йорттан да яҡтыраҡ мөхит бармы икән донъяла? Бала тәрбиәләү - ауыр һәм яуаплы хеҙмәт. Һеҙ һәр берегеҙ ғәзиз сабыйығыҙ аҡыллы, лайыҡлы кеше булып үҫһен өсөн көсөгөҙҙө ҡыҙғанмай, улар күңеленә бары изгелек орлоҡтарысәсергә тырышаһығыҙ. Шуға ла ата-әсәләр иң ҙур хөрмәткә лайыҡ.

Ғаиләлә ата-әсә өсөн иң мөһиме -баланын кеше булып үҫеүе. Халҡыбыҙ был теләкте үҙенең мәҡәл-әйтемдәрендә сағылдыра килгән. “Ата-әсә теләге утҡа, һыуға батырмаҫ”,”Атай- алтын ҡаҙаҡ,әсәй- алтын ҡанат”,”Атай булмай атай ҡәҙерен белмәйһең,әсәй булмай әсәй ҡәҙерен белмәйһең” тип балаларҙы ата-әсәгә ҡарата мәрхәмәтле, изгелекле булырға өндәй .Бала кем генә булмаһын үҙ ғаиләһен ярата, хөрмәт итә.Тыуған илде яратыу, дуҫлыҡ төшөнсәһен белеү, бөтә кешеләргә хөрмәт менән ҡарау, дөрөҫлөктө һөйләү, алдашыуҙы яратмау кеүек бөтә был һәләттәргә бала ғүмере буйы өйрәнә . Әҙәпле кеше үҙ һүҙенә, эшенә тоғро кеше. Әммә иң мөһимәхләҡи ҡимммәттәр бала саҡта һалына. Бала бәләкәй саҡтан атаһына, әсәһенә ҡарап өйрәнә. Яҡшы -яман, изгелек -яуызлыҡ төшөнсәһен тиҙ генә отоп ала. Артабан бала тәрбиәләүҙә гимназия мөһим роль уйнай, әммә ата-әсәнең йоғонтоһо ҙур булып ҡала. Әгәр ғаилә һалған тәрбиә менән мәктәп тәрбиәһе тап килһә, бала күңелендә уҡытыусыларға ла, тәрбиәселәргә лә, иптәштәренә лә ышаныс нығына. Ғаиләлә, мәктәптә балалар өйрәнә. Балаларҙың ихтирамлы булыуын теләһәгеҙ, иң тәүҙә уларға ҡарата иғтибарлы, ихтирамлы, һәм изге күңелле булыу кәрәк. Һәр саҡ тыйып тороуҙар, аҡырып-екереп аҡыл өйрәтеүҙәр - үҙҙәре үк тиҫкәрелек тәрбиәләй, үҫмерҙәрҙә кирелек, ҡаршылашыу, асыу тыуҙыра. Һәр ғаиләлә ата-әсә, балалар өсөн көнкүреш эштәре иҫәп-хисапһыҙ.Һәр кем унда үҙ ярҙамын күрһәтә ала. Үҙ әйберен тәртиптә тоторға, өй йыйыштырыу,бәләкәй туғандарҙы ҡарау, мал-тыуар, баҡса эштәрендә ярҙам итеү кеүек ябай ғына эштәр балаларҙы ололарға ярҙам ҡулы һуҙырға өйрәтә.

Тәрбиә эшендә иң мөһиме - балаға карата һәр эштә теүәл була белеү. Белем алыу-ауыр хеҙмәт. Ул ҙур тырышлык, түҙемлелек һәм эш талап итә.Шуңа күрә балала ихтыяр көсө тәрбиәләү бик мөһим. Сабый бала төрле эштәрҙе теләп башкара, ә инде ҙурая төшкәс, әгәр һәр эште уның өсөн өлкәндәр эшләй торған булһа, балала үҙаллылык һәм тырышлык тәрбияләү ҡыйынлаша, шуның өсөн балағыҙҙы кесе йәштән үк үҙ-үҙенә хеҙмәт

күрһәтергә өйрәтеү, ҡулынан килә торган бөтөн эште үҙенән эшләтеү мөһим. Шул сакта гына ул һәрсак берәр шөғөл менән мәшғүл буласак.
Билдәле булыуынса бала телевизорҙа, кинола, театрҙа, интернет селтәренән ҡарап та изгелек-яуызлыҡ төшөнсәһен үҙенә һеңдерә.
Ундағы супер геройҙарға оҡшарға тырыша.Балаларҙың ҡырыҫ тәбиғәте, һүгенеү , бер-береңде ихтирам итмәү кеүек әшәке хәлдәрҙе бала тиҙ генә отоп ала. Бындай кино, фильмдар баланың ныгынып етмәгән аңын ҡаҡшата. Шуның өсөн бала үҙаллы телевизор ҡарағанда, компьютерҙа ултырғанда уларға күҙ һалырға кәрәк. Тәрбиә эшендә вак әйбер юк. “ Баланы үҙ-ара һөйләшкәндә йәки уға бойороҡ биргәндә генә тәрбиәләйбеҙ, дип уйламағыҙ,- дигәнА.Макаренко ата- әсәләргә мөрәжәгәт итеп. Һез аны тормошоғоҙҙоң һәр миҙгелендә. Хатта үҙегеҙ өйҙә юк саҡта ла тәрбиәләйһегеҙ. Нисек кейенәһегеҙ, башҡа кешеләр менән нисек һөйләшәһегеҙ һәм уларға ниндәй баһа бирәһегеҙ, нисек шатланаһығыҙ, йәки нисек борсолаһығыҙ, дуҫтарығыҙ менән нисек мөғәләмә итәһегеҙ, нисек көләһегеҙ, әҙәбиәтте нисек укыйһыгыҙ - былар барыһы ла бала өсөн ҙур әһәмиәткәэйә.”
Балаларҙы тәрбиәләгәндә ғаилә тәрбиәһенә, халык педагогикаһына таяныу ярҙам итә: ата-әсә, өләсәй-олатай үрнәге, балаға ышаныс күрһәтеү, аңлатыу, өйрәтеү, үтенеү, кәңәш биреү, боронғолар һүҙенә таяныу һ. б.
Ғаиләлә бала әҙәплелектең төп ҡағиҙәләренә өйрәнә. Тәрбиәле баланың төп сифаты-кешеләргә ягымлы, тәмле телле булыу, уларҙы ихтирам итеү, кешелеклелек. Был сифаттарға нигеҙ бәләкәй саҡтан һалына.Олоно оло итеү, кеселәргә ярҙам итеү һәмуларға үрнәк булыу, намыҫлылыҡ, һаулыҡ, кунаксыллык сифаттары, хеҙмәткә мөнәсәбәт, төрлө һәнәрҙәргә өйрәнеү, гөмүмән, йәшәргә өйрәнеү нигеҙҙәре ғаиләлә тәрбиәләнә. Татыу гаиләлә тыуған балалар ата-әсәләренең иҙге ниәттәрен төплө аңлай, тормошта, эшһөйәр, әҙәпле һәм кешеләргә ихтирамлы, иғтибарлы була. Ундай ғаиләләрҙә татыулыҡ, миһырбанлыҡ ололарҙан кеселәргә күсә килеүсән. халҡыбыҙ тормошонда ошондай яҡшы күсәгилешлек борондан күҙәтелгән. Шуға ла ундай ғаиләлә тыуған балалар,төплө тәрбиә алғандан һуң, донъяға ысын кеше булараҡбаға. Ғаилә - айырым донъя. Ғаилә аша ғына һин үҙ булмышыңды аңлайһың, бары тик унда ғына иң яҡшы кешелек сифаттарын, рухи көсөңдө үҫтерә алаһың. Балалар ата-әсәләренән өлгө ала. Улар ата-әсәнең ҡарашын, фекерләүен һәм рухи ҡиммәттәрен үҙләштерә, бөтә аҙымын ҡабатлай. Гимназия менән ғаиләнең бәйләнеше нығый барған һайын, балаларыбыҙ тәрбиәлерәк, уңыштарыбыҙ да ҙурырак булыр. Өйҙән йылы усағын һаҡлаған, милләт киләсәген хәстәрләгән балаларыбыҙ рухына ҡеүәт биргән ғаиләләр менән гимназиябыҙ ғорурлана ала. Хөрмәтле атайҙар, әсәйҙәр һеҙҙең балаларығыҙға ҡылған һөйөүегеҙ, түккән ваҡытығыҙ, көсөгөҙ мотлаҡ—һеҙҙе ҡыуандырыр яҡты киләсәк булып— әйләнеп ҡайтасаҡ. (Шоңҡар журналы материалдары ҡулланылды).

**Өй эштәрен әҙерләүҙе нисек ойошторорға?**

Өй эштәрен намыҫ менән, тырышып, еренә еткереп эшләү уҡыусыларҙың мәктәптә дәрес ваҡытында алған белемдәрен нығытырға һәм тәрәнәйтергә ярҙам итә, эшләй белеү күнекмәләрен үҫтерә һәм камиллаштыра. Өй эштәрен әҙерләүҙе дөрөҫ ойоштороу уҡыусыларҙа үҙ аллы эшләү күнекмәләрен барлыҡҡа килтерә һәм нығыта, үҙ һүҙендә ныҡ тороу ғәҙәтен һәм хеҙмәт һөйөү күнекмәләрен тәрбиәләй. Системалы эшләү ғәҙәтен тәрбиәләү өй эштәренә билдәләнгән бер ваҡыт булдырыуҙан башлана. Бынан башҡа бер нисек тә уҡыуҙа ҙур уңыштарға ирешеп булмай. Билдәле булыуынса, өй эштәрен бер үк сәғәттә әҙерләргә ғәҙәтләнгән уҡыусыларҙың организмдары ошо ваҡытта аҡыл хеҙмәте менән шөғөлләнергә әҙер булып тора. Күп кенә ваҡыт шуны күҙәтергә була, уҡыусы дәрес әҙерләргә ултырғас та, иғтибарын ситкә йүнәлтергә мәжбүр була: йә уның ҡәләме булмай, йә линейкаһы янында булмай, йә юйғыс кәрәк. Быға ваҡыт китә, ә иң мөһиме- был уҡыусының иғтибарын сит эштәргә йүнәлтә. Ваҡытты файҙалы ҡулланыуҙың бер юлы-эш урынында тәртип булдырырға кәрәк. Унда иғтибарҙы ситкә йүнәлтә торған бер генә артыҡ әйбер ҙә булырға тейеш түгел. Баланың өй эшен эшләү урыны уңайлы булырға тейеш.

Ата-әсәләрҙән йыш ҡына: “Өй эштәрен ниндәй тәртиптә эшләргә һуң: башта телдән үтәп, һуңынан яҙма эштәрҙәнме, еңелдән башларғамы, әллә ауырҙанмы?”- тигән һорауҙарын ишетергә тура килә. Быға универсаль яуап биреп булмай, сөнки яңы материалды ҡабул иткәндә лә, иғтибарлыҡтың тотороҡлоғонда ла, бер эштән икенсе эшкә күскәндә лә балаларҙың һәр береһенең индивидуаль айырмаһы була.

Башланғыс кластарҙа, ғәҙәттә, өй эше әҙерләүҙе яҙма эштәрҙән башларға, ә унан һуң телдән башҡарыла торған эштәрҙе эшләргә ҡушалар. 1-2-се кластар өсөн был рекомендация күп осраҡта тура килә. Ә өлкән класс уҡыусылары өй эштәрен әҙерләүҙе үҙҙәре билдәләргә тейеш.

Баланы тәрбиәләгәндә иң мөһиме ҡысҡырмаҫҡа, баланы нисек бар, шулай яратырға. Шулай итеп…

1. Баланың һорауҙарына тыныс һәм дөрөҫ яуап бирергә. Ашыҡһағыҙ, ваҡытығыҙ булмаһа ла ҡысҡыра башламағыҙ, уны ҡапыл бүлдермәгеҙ.
2. Баланың һорауҙарын етди ҡабул итегеҙ.
3. Баланың үҙе өсөн генә айырым бүлмә булдырығыҙ.
4. Бала үҙенең эштәрен һәм ҡаҙаныштарын күрһәтә алған урын булһын.

5. Баланың өҫтәлендәге тәртипһеҙлек ижади эш менән бәйле булғанда әрләшмәгеҙ. Әммә эште тамамлағас, урынын йыйыштырып ҡуйыуын талап итегеҙ.
6. Баланы ниндәйҙер уңыштары өсөн түгел, ә нисек бар шулай яратыуығыҙҙы күрһәтегеҙ.
7. Балаға ҡулынан килерҙәй эштәр ҡушығыҙ.
8. Балаға үҙ пландарын төҙөргә, ҡарарҙар ҡабул итергә ярҙам итегеҙ.
9. Эшенең һөҙөмтәләрен яҡшыртырға булышығыҙ.
10. Үҙегеҙ менән ҡыҙыҡлы урындарға сәйәхәткә алығыҙ.
11. Балағыҙҙың кәмселектәрен күрһәтеп башҡа балалар менән сағыштырмағыҙ.
12. Баланы кәмһетмәгеҙ.
13. Баланы үҙаллы фекер йөрөтөргә өйрәтегеҙ.
14. Баланы китаптар, уйынсыҡтар менән тәьмин итеп тороғоҙ.
15. Баланы төрлө ваҡиғалар уйлап сығарырға, фантазияларға өйрәтегеҙ. Быларҙы бергә башҡарығыҙ.
16. Баланы кесе йәштән китап уҡырға өйрәтегеҙ.
17. Уның ихтыяждарына иғтибарлы булығы

*Балалары дөйөм белем биреү учреждениеларында уҡыған ата-әсәләр өсөн практик кәңәштәр*

- Баланың үҙенсәлекле яҡтары әле үк бар, уларҙы күрә белергә кәрәк.
- Маҡтау һүҙҙәрен йәлләмә. Башҡарыусыны маҡта, башҡарылған эште генә тәнҡитлә.
- Баланың алдына ул атҡара алырлыҡ маҡсаттар ҡуйығыҙ.
- Рөхсәт итеүҙәр, тыйыуҙарға ҡарағанда балаларҙы яҡшыраҡ өйрәтә.
- Бала үҙен ни өсөн шелтәләгәнде белергә, аңларға тейеш.
- Һәр бала, насар өлгәшәме ул, әллә яҡшы уҡыймы, хәрәкәтсәнме, әллә яймы, спортсымы ул, әллә ялҡаумы - ялҡаумы - яратыу һәм ихтирамға лайыҡ, ул булыуы менән ҡәҙерле.
- Талапсанлыкты арттырыу аванс менән маҡтау һүҙҙәренән башланырға тейеш.
- Онотмағыҙ, бала тик етешһеҙлектәрҙән, уңышһыҙлыҡтарҙан ғына тормай.
- Үҙегеҙгә инанырға кәрәк – күп осраҡта тәнҡит, талапсанлыҡ, тыйыуҙар һис кенә лә кәрәкмәй!

Ата-әсәләргә кәңәштәр

- Балаға бәләкәй генә асыштар эшләргә мөмкинлектәр бирегеҙ.
- Эмоциональ ҡәнәғәтлек ни тиклем юғары булған һайын, белем алыуҙа уңышҡа өлгәшеү мөмкинлеге шул тиклем үк юғары.
- Балаларҙың яңылышыуҙарынан ҡурҡмағыҙ. Бала хатаһы – ул табыш.
- Онотмағыҙ, бер хата икенсе фекерҙе тыуҙыра.

- Онотмағыҙ, аҙ яратыу һәм үҙ-үҙен түбән баһалау уҡыу барышындағы уңышһыҙлыҡтарға килтереүе ихтимал.
- Балаға үҙе аңлай, төшөнә алырҙай нәмәләрҙе тылҡымағыҙ.
- Балаларҙы яратығыҙ һәм һөйөүегеҙҙе күрһәтеүҙән тартынмағыҙ.

## Уңыш сере

Барыһы ла “Уңышлы булғым килә”  тип хыяллана. Ә уңышлы булыуҙың сере низә? Уның сере-ете хикмәттә.

*Тырышлыҡ*

Был-бөгөнгө йәшәйешебеҙҙә иң мөһимдәренең береһелер. Сөнки ҡайҙандыр көтөп, миңә килтереп бирерҙәр, тип уйлап ултырыу-әлеге замандың бәләһе. Шуны онотмағыҙ: уңыш һәр саҡ һеҙҙең эргәлә генә, тырышһағыҙ, уға өлгәшә алаһығыҙ.

*Маҡсатлы булыу*

Кеше һәр ваҡыт маҡсаттар, уй-ниәттәр менән йәшәргә тейеш. Буй етмәҫлек ҙур  мотлаҡ түгел, ә үҙенең ҡулынан килерлек, тормошона мәғәнә бирерлек булһын ул. Мәҫәлән мәктәпте тамамлап, һөнәр алырға, күңелгә ятҡан эш табырға, артабан тағы ла ниндәйҙер ыңғай ынтылыштыр барлыҡҡа киләсәк.

*Тәүәккәллек*

Уңышҡа өлгәшеү өсөн тәүәкәллек үтә мөһим. Ҡарар  ҡабул итә алмайынса икеләнеп ултырырға ярамай, киләсәккә ышаныс менән ҡарарға кәрәк.

*Яуаплылыҡ*

Кемдер һиңә ниндәйҙер эште ышанып тапшыра икән, уны, һис шикһеҙ, еренә еткереп башҡарыу зарур.

*Аралаша белеү*

Беҙ даими рәүештә кем менәндер әңгәмә ҡорабыҙ, аралашыу аша яңы дуҫтар, таныштарыбыҙ барлыҡҡа килә. Асыҡ йөҙлө, алсаҡ кешеләрҙе барыһы ла ярата. Был сифат карьера үсешендә лә уңай. Кәрәк урында әңгәмәгә ҡушылып китеү, фекерҙәреңде еткерә белеү күпселек осраҡта ыңғай ҡараш уята. Өҫтәүенә, мөләйемлегеңде лә эшкә екһәң...

Ярҙамсыллыҡ

Янында ныҡлы таяныс булыуы – уңыштың башы ул. Туғандарың һәм дуҫтарыңдың ярҙамы, үҙеңдең дә уларға битараф булмауың һәр саҡ кәрәгеп тора. Кемгәлер таяна алаһың икән, аҙымдарың  да ныҡлы, тигән һүҙ. Шул уҡ ярҙамсыллығың менән үҙең дә кемгәлер уңыш яуларға булышлыҡ итәһең.

*Итәғәтлелек*

Беҙ туҡтауһыҙ төрлө даирәлә уралабыҙ, сөнки һәр беребеҙең эш-хәрәкәттәре, мөнәсәбәте башҡа кешеләрдонъяһы менән бәйләнгән. Шуға ла оҙаҡҡа һуҙылған, дауамы йә ҡыҫҡа ғына ваҡытта барлыҡҡа килгән мөнәсәбәтме, быныһы мөһим түгел, һинең менән аралашҡан  кешеләрҙең кәйефе ҡырылмаһын, күңеле кителмәһен өсөн бик һаҡ, итәғәтле булырға кәрәк. Һәм тағы ла, дуҫтар, уңышлы булыу өсөн сәләмәт тормош алып барырға кәрәк. Билдәле бер әҙип әйтмешләй, әгәр тормоштоң һеҙгә йылмайыуын теләһәгеҙ, үҙегеҙ уға йылмайып ҡарағыҙ.

Уңышлы булыу һәр кемдең үҙенә бәйле: баҫҡан аҙымына, эшләгән эшенә, үткәргән көндәренә...